*Рәйсә ХАФИЗОВА,*
*Башҡортостан Республикаһы*
*халыҡ мәғарифы министрлығының кадрҙар бүлеге начальнигы*

# БӨГӨН ХӘЛ ИТЕЛӘ

Мәғариф системаһы кадрҙар менән тулыһынса тәьмин ителгән берҙән-бер өлкә. Ул мәғариф өлкәһендәге реформаларҙың, үҙгәрештәрҙең уңышлы барыуында, иң элек профессиональ-педагогик белем биреү эшмәкәрлегенең сифатында күренә. Кадрҙар менән тәьмин итеү, инновацион тәжрибәгә эйә булған, белем биреүҙә традицион булмаған алымдар менән эшләүсе белгестәр әҙерләү — уның төп бурысы.

Әлеге ваҡытта республикабыҙҙа педагогик кадрҙар әҙерләү һәм уларға өҫтәлмә белем биреү менән 9 колледж, 5 училище, 11 техникум шөғөлләнә һәм улар йыл һайын ике мендән ашыу кеше ҡабул итә; 4 педагогик юғары уҡыу йорто һәм университет йыл һайын 2200-ҙән ашыу кешегә белем донъяһының ишектәрен аса. Башҡортостандың мәғарифты үҫтереү институты иһә йыл һайын ун ике мендән ашыу уҡытыусының һәм идара итеүсе кадрҙарҙың белемен камиллаштырыуҙа ярҙам итә. Республикала 2003 йылға тиклем кадрҙар әҙерләү системаһын үҫтереү программаһы әҙерләнгән, уның төп маҡсаты — педагогик белем биреүҙең йөкмәткеһе һәм технологияһы йәһәтенән күсәгилешле, бер төрлө ҡарашлы педагогик кадрҙар әҙерләү һәм уларҙың белемен камиллаштырыуҙың берҙәм ҡеүәһе булған өҙлөкһөҙ профессиональ-педагогик белем биреү системаһын төҙөү.

Ә мәғариф системаһының педагогик кадрҙарға булған талабы һәм мохтажлығы, социаль заказдың төҙөлөшө һәм һан-нисбәте ошо өҙлөкһөҙ педагогик белем биреү системаһы эшмәкәрлегенең төрлө яҡтарын проектлау сығанағы булып тора.

Мәҫәлән, 1999-2000 уҡыу йылында республикабыҙҙың дөйөм белем биреү мәктәптәрендә 67670 уҡытыусы эшләй, шуларҙың 47731-е (70,5%) юғары белемле, 1938-е — тамамланмаған юғары белемгә, 16944-е урта махсус белемгә эйә ине.

Башҡортостан Республикаһының мәғариф министрлығы ҡала һәм район халыҡ мәғарифы идаралыҡтары, юғары һәм урта махсус педагогик уҡыу йорттары менән берлектә алып барған эш һәм педагогик кадрҙарҙы әҙерләү, уларҙы урынлы файҙаланыу, дөйөм белем биреү мәктәптәре уҡытыусыларының, етәкселәренең әҙерлек сифатын яҡшыртыу буйынса күрелгән аныҡ саралар үҙ һөҙөмтәһен бирә.

Әммә был эштә етешһеҙлектәр, хәл итәһе мәсьәләләр ҙә байтаҡ. Әлегә республикалағы бөтә мәктәптәр ҙә педагогик кадрҙар менән тәьмин ителеп бөтмәгән. Айырыуса инглиз теле, туған тел, математика, музыка һәм йыр уҡытыусылары етешмәй. Күп осраҡта ошо урындарға беҙ пенсияға сыҡҡан уҡытыусыларҙы йәлеп итәбеҙ.

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты менән берлектә кадрҙар мәсьәләһенә ҙур иғтибар бирә, уның яҡындағы һәм алыҫ йүнәлештәрен, тармаҡтың норматив-хоҡуҡ, ғилми-методик, социаль йәһәттән үҫешен тәьмин итеү буйынса саралар комплексын билдәләй. Башҡортостан Республикаһының Фән, юғары һәм урта профессиональ белем биреү буйынса дәүләт комитеты менән берлектә юғары һәм урта педагогик белем биреү учреждениеларының эшмәкәрлеген заман талаптарына ярашлы итеп үҙгәртеп ҡороу буйынса ҙур эш алып барыла. Был проблемаларҙың күбеһе Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәре өсөн дә хас. Бына уларҙың бер нисәһе:

— уҡыу йорттарын тамамлаған белгестәр һаны, педагогик һөнәрҙәр нисбәте күп осраҡта белем биреүҙең реаль талаптарына тап килмәй;

— профессиональ-педагогик белем биреүҙең йөкмәткеһе һәм технологияһындағы күсәгилешлек тейешле кимәлдә түгел, был эш педагогик колледж — педагогик юғары уҡыу йорттары араһында айырыуса аҡһай;

— педагогик синыфтарҙа профориентация эшенең һөҙөмтәһе түбән;

— педагогик уҡыу йорттарында ауыл еренән килеп уҡырға ингән талиптар һаны аҙ, ә бит ҡала мәктәптәрен тамамлаусыларҙан айырмалы рәүештә, уларҙың күбеһе ауылға ҡайтып мәктәптә эшләргә ниәтләй.

Ошо һәм башҡа мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн республикала нимәләр эшләнә һуң?

Беренсенән, балалар һаны кәмеү менән бәйле, мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениелары белгестәре, башланғыс синыф уҡытыусыларының һаны артыу сәбәпле, һуңғы йылдарҙа был һөнәрҙәр буйынса уҡырға ҡабул итеү кәметелде. Бер үк ваҡытта яңы педагогик һөнәрҙәр нисбәте байтаҡҡа киңәйҙе: социаль педагог, башланғыс синыфтар, балалар баҡсалары өсөн сит ил уҡытыусылары, психологтар әҙерләнә. Мәҫәлән, әгәр 1993-1994 уҡыу йылында педагогия училищеларына 6 һөнәр буйынса талиптар ҡабул ителһә, 1999-2000 уҡыу йылында һөнәр төрҙәре 9-ға етте.

Икенсенән, республикабыҙҙағы милли мәктәптәрҙе һәм мәктәпкәсә учреждениеларҙы юғары һәм урта махсус педагогик белемгә эйә булған белгестәр менән тәьмин итеүгә ҙур иғтибар бирелә.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт, татар, мари һәм сыуаш телдәре һәм әҙәбиәттәре уҡытыусыларын әҙерләү буйынса уҡырға ҡабул итеү артты, башланғыс синыф уҡытыусыларының юғары белемгә эйә булырға ынтылыуы хуплау таба.

Рәсәй Федерацияһының башҡа бик күп төбәктәре кеүек, республика һуңғы йылдарҙа сит тел уҡытыусыларына ҡытлыҡ кисерә. Беҙ был мәсьәләне 3-4 йыл эсендә тулыһынса хәл итергә ниәтләйбеҙ, сөнки дүрт педагогия колледжында ошо һөнәр буйынса тейешле бүлектәр асылды.

Өсөнсөнән, профессиональ белем биреүҙең өҙөкһөҙлөгөн тәьмин итеү маҡсатында республикабыҙҙың педагогик юғары уҡыу йорттары педагогия училищелары һәм колледждар менән берлектәге программа әҙерләне. Был иһә уҡытыусыларға төп һөнәренән тыш башҡа һөнәр серҙәрен үҙләштерергә булышлыҡ итә: улар көндөҙгө бүлеккә 2-се курсҡа йәки ситтән тороп уҡыу бүлегенең 3-сө курсына уҡырға ҡабул ителә. Дөрөҫөн әйткәндә, әлегә бөтә Рәсәй бу-

йынса өҙләкһеҙ педагогик белем биреүҙе тормошҡа ашырыуҙың норматив-хоҡуҡи базаһы юҡ. Шулай ҙа быйыл ошо эште яйға һалырға ярҙам иткән документ булыр, тип өмөтләнәбеҙ.

Республикабыҙҙың юғары педагогик уҡыу йорттарында тейешле квалификациялы педагогик кадрҙарҙы күп кимәлле итеп әҙерләү түләүле нигеҙҙә лә атҡарыла. Шуға күрә айырыуса кәрәк булған педагогик һөнәрҙәр (психолог, социаль педагог, дефектолог, Башҡортостан мәҙәниәте уҡытыусыһы) буйынса юғары белем алырға теләгән тәжрибәле уҡытыусыларға бөтә шарттар булдырыла.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күп мәктәптәрҙә бөгөнгө көнгә был яңы һөнәрҙәр уҡытылмай, ә бит улар күп йәһәттән баланы, ғаиләне яҡлауға йүнәлтелгән.

Дүртенсенән, йәштәрҙе педагог һөнәренә йүнәлтеүҙе ойоштороу, ауыл йәштәренең белем кимәлен күтәреү, Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының ҡарарына ярашлы, юғары уҡыу йорттарында уҡытыу өсөн махсус бүленгән урындарҙы тейешенсә файҙаланыу маҡсатында уҡыусыларҙы юғары уҡыу йорттарына әҙерләү үҙәктәре булдырылды. Был бурысты тормошҡа ашырыу өсөн республикабыҙҙың Фән, юғары һәм урта профессиональ белем биреү буйынса дәүләт комитеты менән килешеү төҙөлдө.

Әммә шуны ла әйтеп китергә кәрәк: ҡайһы бер районларҙа педагог кадрҙарҙың етешмәүенә иң элек ошо район етәкселәре ғәйепле, сөнки улар булған мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланмай.

Башҡортостандағы педагогик юғары уҡыу йорттарына уҡырға ҡабул ителгәндәрҙең 30 процентын ауыл йәштәре тәшкил итергә тейеш. Бынан тыш Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының махсус ҡарары менән уларға тағы 10 процент урын бүленә. «Ауыл мәктәбе» тигән маҡсатҡа ярашлы комплекслы программа нигеҙендә ауыл мәктәптәрен тамамлаусыларҙы юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә әҙерләү маҡсатында Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты тарафынан уҡыу-консультация үҙәктәре, терәк мәктәптәр булдырылды, педагогия институттарының филиалдары асылды.

Республикалағы мәктәптәрҙең 85 проценттан күберәге ауыл ерендә урынлашҡан. Шуға күрә иң элек ауыл уҡытыусыһының профессиональ-педагогик үҫешен күҙаллау, ғилми һәм методик системаһын ойоштороу бурысын хәл итеү үтә мөһим.

Мәғариф министрлығы тарафынан республикабыҙҙың дөйөм белем биреү учреждениеларын юғары квалификациялы педагогик кадрҙар менән тәьмин итеү йәһәтенән аныҡ саралар күрелә. Мәҫәлән:

1) педагогтарҙың хәл-торошо мониторингы системаһы ойошторолған, кадрҙар хаҡында мәғлүмәттәр банкы булдырылған, халыҡты эшкә урынлаштырыу буйынса ҡала һәм район службалары менән бәйләнеш урынлаштырылған;

2) йыл һайын юғары һәм урта педагогик уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙы эшкә урынлаштырыу һөҙөмтәләренә анализ яһала;

3) белем биреү учреждениеларына талап ителгән белгестәргә мохтажлыҡты, шулай уҡ уларҙы тормошҡа ашырыу барышын сағылдырған мәғлүмәт йыйынтыҡтары даими сығарылып килә;

4) Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтында «Белем биреү менеджеры» һәм «Башҡортостан мәҙәниәте» һөнәрҙәре буйынса өҫтәлмә белем биреү башланды.

Шуны ла әйтеп үтеү мөһим: беҙҙең юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарында ҡайһы бер өр-яңы һөнәрҙәр буйынса педагогтар әҙерләү талап ителә.

— хоҡуҡ тәртибен боҙоуы мөмкин булған балалар менән индивидуаль педагогик иҫкәртеү эшен ойоштороусы;

— педагогик коррекция һәм социаль-педагогик йәһәттән төҙәтеүсе белгес;

— педагогик мониторинг, маркетинг һәм менеджмент белгесе;

— балаларҙың йәйге ялын, һәр төрлө ижади эшмәкәрлеген ойоштороусы;

— мәктәптә һәм унан тыш балаларҙың ижтимағи берекмәләренең эшен ойоштороусы;

— профессия һайлауҙа йүнәлеш, кәңәш биреүсе, профдиагностика белгесе;

— медицина учреждениеларында балаларға психологик һәм педагогик ярҙам күрһәтеүсе.

Заманыбыҙҙың һәр төрлө ҡыйынлыҡтарына ҡарамайынса, республикабыҙҙың Мәғариф министрлығы белем биреү учреждениеларын юғары квалификациялы кадрҙар менән тәьмин итеү бурысын тәүге планға ҡуя, сөнки йәмғиәтебеҙҙең киләсәге бөгөн хәл ителә.